**ЗАДАНИЯ**

**II тура дистанционной олимпиады**

**по Башкирскому языку для учащихся 5 - 8 классов**

1. *Ҡулъяулыҡ* һүҙенә фонетик анализ эшләгеҙ.

2. Һөйләмдә дөрөҫ итеп тыныш билдәләрен ҡуйырға: *Көнгәк юлсылар менән айырылышырға теләмәгәндәй улар барған ыңғайға әкрен генә боролоп шагирҙың уйҙарын үҙенә ылыҡтырҙы барыбер* (Булат Рафиков).

3. Бирелгән текстан сифат ҡылымдарҙы күсереп яҙығыҙ. *Ҡан-бабаның төп билдәһе – изге аҡ йылан тиреһе уралған, осона бүре башы беркетелгән өйәңке таяҡ һәр саҡ тирмә түрендә күренеп торған урында ҡәҙерләп һаҡлана. Әйткәндәй, бүтән баш ҡорттар ҙа оло йыйындар мәлендә яурын аша күкрәккә һалындырып бүре башы йөрөтә, әммә ошондай таяҡ ырыуҙа бераү. Уны тотоп сығыу – ғәҙәттән тыш хәл. Әле лә Аҙнай бей ишектә күренеү менән, шаулаша башлаған ир-ат, таяҡты абайлап, ҡапыл шым булды, Ике хеҙмәтсе ҡан-бабаның аяҡ аҫтына аҡ тире йәйә һалды, шунда йомшаҡ көрси килтереп ҡуйҙы. Аҡ бүре тиреһе, тиеште ҡарттар, артҡа сигенеп; ситтә торған йәштәр, киреһенсә, ҡапыл тылсым көсө ингән урынға тартылды, бер-береһенең яурыны аша муйын һуҙҙы* (Булат Рафиков).

4. Бирелгән ябай һөйләмдәрҙән кире эйәрсән һөйләмле эйәртеүле ҡушма һөйләм төҙөп яҙығыҙ:

*Алма ялҡауҙы яратмай.*

*Ялҡау алманы ярата.*

5. Түбәндәге текстың стилен билдәләгеҙ:

*И-и, тәбиғәттең сәңгелдәктә атынған сабый сағы! Күпме тауыш, күпме дәрт, күпме моң! Ағастарҙа яңы морон төрткән наҙлы япраҡ кешенең һуҙылған ҡулына ылығырға ғына тора, ә ояһында йомортҡа баҫып ултырған ҡошсоҡ, һауаға күтәрелеп: "Һаҡ ҡылан! Мине бимазаларға ярамағанын күрмәйһеңме ни?" – тип ҡысҡыра һымаҡ, ә ҡышҡы йоҡоһонан уяныр ҡояшта ҡыҙынырға сыҡҡан һыуыр, ҡытай күҙҙәрен йылтыратып: "Донъя элеккесә икән, шөкөр!" – тип, бер аҙ айбаныу кәрәклеген дә онотоп, һинән бер нисә аҙымситтә ҡымшанмай ҙа баҫып ҡала*(Булат Рафиков).

6. Тыныш билдәләрен ҡуйып, һөйләмде күсереп яҙығыҙ: *Бына шул кешенең йәйләүен эҙләп китте юрматылар Һарытау янында уңышһыҙлыҡҡа осрағас* (Булат Рафиков).

7. Бирелгән һүҙҙәрҙе эйәлек килешкә ҡуйып яҙығыҙ:*Томск, Донбасс, грамм, секретарь, сентябрь.*

8. Бирелгән һүҙҙәргә күплек ялғауын ҡушып яҙығыҙ:

*Коммунист, подъезд, повесть, нерв.*

9. Текстағы һөйләмдәрҙең морфологик бәйләнеү төрөн асыҡлап яҙығыҙ: *Ел һиҙелеп һалҡыная, һауа дымлана. Дауыл баҫылды. Донъя дәһшәтле тынлыҡҡа сумды. Бына йәшен яҡында ғына ялтлай, баш осонда тиерлек күк күкрәй. Ямғыр яҡыная* (Ф. Иҫәнғолов).

10.Текстағы һөйләмдәр ниндәй стилистик сара ярҙамында бәйләнгән: *Аҙнай бей тирмәһенең эргәһендә көрсиҙә ултыра, ҡаршыһында саҡ баш ҡалҡытҡан йәшел сирәмгә бер нисә үҫмерҙең теҙләнеүенә ҡарағанда , нәк ҡан-баба вазифаһын башҡара ине. Яҡынлашып килеүсе һыбайлыларҙы күргәс, ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып ҡарап алды ла урынынан теремек кенә күтәрелде һәм бағлыларына ниҙер өндәште*(Булат Рафиков).

11. Өфөнөң уртаһында нимә?

*12.* Былтыр 30 февраль нимә булды?

**13.** Ай исемен, аҙна, көндө әйтмәйенсә, 5 көндө атарға.

**14.** Ленин майҙанын нисек табырға?

**15.** Нимә ауырыраҡ: 1 кг. ҡаҙаумы, 1 кг. мамыҡмы?

**16.** Йылдың иң ҡыҙҡа айын атарға.

**17.** Көн һәм төн нимә менән бөтә?

**18.** Тәҙрә башында нимә?

**19.** Һыуҙа ниндәй таш юҡ?

**20.** Ямғыр ваҡытында ҡуян ниндәй ағас аҫтында ултыра?